Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа с.Нугуш
муниципального района Мелеузовский район
Республики Башкортостан

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
|---|---|---|
| на заседании ШМО<br>Протокол № 1<br>_____ Кинзябулатова Г.В.<br>«27» августа 2020г. | Зам.директора по УР<br>_____ Занкина Н.В.<br><br>«28» августа 2020г. | Директор МОБУ СОШ с.Нугуш<br>_____ Габбасова Г. Ш.<br>Приказ № 83 от 28.08.20<br>«28» августа 2020г. |

**Рабочая программа**
**по башкирскому языку**
**для 5-9 классов**
Уровень образования: основное общее образование
Срок реализации: 2020-2025гг.

**Составители:**
учителя башкирского языка и литературы
Габбасова Р.М.
Ямансарина М.Д.

2020

I.**Уҙыу предметын үҙләштереүҙең предмет 8525мт9л9ре**

**Ш9хс9н 8525мт9л9р**

т5п дөйөм м9кт9п уҙыусыларыны4 баш3орт телен9н программаны 72л9штере7;

- Баш3ортостан Республика8ында баш3орт телене4 д97л9т теле булыуын а4лау: баш3орт телен у3ыу, эшм9к9рлек 89м профессиональ эшм9к9рлект9 к9р9кле булыуын а4лау;

- баш3орт телен 19м9лд9 3улланыу1а 92ерлек: м929ни - ара аралашыу2а толерантлы3;

- баш3орт телене4 баш3орт м929ни9те мен9н танышыу сара8ы булыуын а4лау.

**Метапредмет 8525мт9л9р**

рус телле м9кт9пт9р29 баш3орт телен 5йр9не7:

- телд9н 89м я2ма х9б9р ителг9н м91л7м9тте адекват 3абул ите7;

- т5рл5 стилд9ге 89м жанр2а1ы тексты т5рл5 у3ыу т5р29ренд9 3абул ите7;

- ты4лан1ан 89м у3ыл1ан тексты бирелг9н эш т5р29ре (план, й5км9тке8ен 85йл97, 85йл9п сы1ыу, конспект) мен9н я4ынан 85йл9й беле7;

- аралашыу сфера8ы 89м шартына 3арап, телд9н 89м я2ма уйы4ды т525й беле7, 94г9м9, фекер алышыу, дискуссияла 3атнаша алыу;

- 72 аллы белем ала беле7, т5рл5 м91л7м9т сы1ана3тары, Интернет ресурстары, ва3ытлы матбу1ат ба6малары мен9н эшл9й беле7; белешм9 929би9т мен9н 3уллана алыу;

- т919йен тема1а материалды 8айлап ала 89м система1а килтере7 ысулдарын 72л9штере7; 72 3арашы4ды анализлай, са1ыштыра, к7р89т9, 8ы1ымта я8ай, йом1а3лай, ниге2л9й беле7;

- баш3орт телен баш3а предметтар2ан белем алыу сара8ы булара3 3уллана алыу 89л9тлеген 76тере7;

- 72 телм9ре4де ба8алау к7некм9л9рен 72л9штере7;

- предмет-ара ким9лд9 (ту1ан тел, сит тел, 929би9т) тел к7ренешт9рен анализлай беле7;

**Предмет 8525мт9л9ре**

- т5п а4латмалар2ы 72л9штере7**:** тел 89м телм9р, телд9н 89м я2ма телм9р, диалог 89м монолог, телм9р ситуация8ы, телм9р2е4 фукциональ стилд9ре 89м типтары, текст; телде4 система8ы: фонетика, орфоэпия, лексика 89м фразеология, 872 составы 89м 872ья8алыш, морфология, синтаксис, орфография 89м пунктуация;

- баш3орт телене4 телм9р бер9мект9рен беле7, улар2ы4 билд9л9рен, 872, 872б9йл9неш, 85йл9м, улар2ы4 72енс9лект9ре;

- телм9р практика8ында ситуация 89м аралашыу стиленд9 тел бер9меген урынлы 3улланыу;

- фонетик 89м лексик системаны4 т5п 72енс9лект9рен 89м ту1ан тел мен9н са1ыштырмаса баш3орт телене4 грамматик т525л5ш5н беле7;

- баш3орт 929би тел нормаларын 89м телм9р этикетын беле7 89м улар2ы телд9н 89м я2ма 9йтерг9 фекере4де т525г9нд9, й91ни телм9р практика8ында 3улланыу;

- т5рл5 т5р29ге лингвистик шул у3 ва3ытта, ике телле 872лект9р мен9н 3уллана беле7;

- т5рл5 фукциональ стиль 89м жанр2а1ы д5й5м текст й5км9тке8ен у3ыу 89м а4лау: 929би (ши1ыр, йыр, хик9й9, повесть 89м романдар2ан 525кт9р),

1илми 89м популяр (1илми 89м популяр журналдар2ан м939л9л9р), публицистик (хроника, информацион х9б9р29р, комментарий), эшлекле (анкета, белдере7, ышаныс 3а1ы2ы 89м б.);

- 1929ти темпта т93дим ителг9н м91л7м9тте (у3ытыусы телм9ре, радио 89м телевидение дикторы телм9ре 8.б.) а4лау;

- аралашыу сфера 89м ситуацияны иб9пк9 алып, т5рл5 жанр 89м стилд9ге текст т5257; к5нк7реш, у3ыу, социаль м929ни тема1а телм9р этикет нормаларын 8а3лап, 72 инициатива8ы мен9н диалогты алып барыу;

- текст мен9н м91л7м9т сы1ана1ы булара3 эш ит9 беле7, текска т5рл5 аспекта анализ, тексты план1а, тезис, конспекта 9йл9ндере72е4 т5рл5 т5п информацион т5р29рен 72л9штере7;

- рус телен9н текст фрагменттарын баш3орт телен9 т9ржем9 ите7.

## II.Уҡытыу предметының йөкмәткеһе. 5 класс.

### 1.Һаумы мәктәп! – 4 сәғәт

Был тема башлыса "Көҙ" темаһы менән бергә үрелеп бара.Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу. Башҡорт теленең өн-хәрефтәре, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Сифат.

### 2.Үҙем тураһында – 3 сәғәт.

Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында, үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.

### 3.Йыл миҙгелдәре – 4 сәғәт.

Йыл миҙгелдәре менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә белеү. Һорау алмаштары. Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.

### 4.Башҡортостанды беләһеңме? – 3 сәғәт.

Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре. хаҡында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.

**5. Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена – 2 сәғәт.**

Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**6. Яңы йыл менән – 2 сәғәт.**

Яңы йыл темаһы ҡыш темаһы менән берлектә алып барыла. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл менән туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре тураһында һөйләтеү. Ҡылымдың зат һәм һан менән үҙгәреше.

**7. Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Өй. Магазин – 4 сәғәт..**

Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Синоним.

**8. 8 март –ҡатын-ҡыҙҙар байрамы– 2 сәғәт.**

Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы әсәйҙәрҙең бөйөк зат булыуы тураһында һөйләргә өйрәнә. Көләс булһын әсәйҙәр! Әсә рәхмәте. Антоним.

**9. Яҙ етте. Яҙғы эштәр – 3 сәғәт.**

Яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә өйрәтеү. 1 май, 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында һөйләшеү. Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре, баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Омоним.

**10. Йәйҙе ҡаршылайбыҙ - 2 сәғәт.**

Ҡуҙғалаҡ, Йыуа байрамы.Тәбиғәткә экскурсия.

5 – се класта телмәр үҫтереүгә 2 сәғәт, контроль диктантҡа 2 сәғәт бүленә.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе. 6 класс.

**1. Беҙҙең мәктәп – 4 сәғәт.**

1 сентябрь - Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1 – 5 –се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау. Исем. Исемдәрҙең күплек ялғауҙары. Текст. Синонимдар.

**2. Башҡортостан ере буйлап – 5 сәғәт.**

Башҡортостан Республикаһы, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Синоним. Антоним. Омоним. Ҡылым. Ҡылымдарҙың барлыҡ, юҡлыҡ формаһы. Күрһәтеү алмаштары. Диалог.

**3. Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел – 3 сәғәт.**

Ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы, уны һаҡлай белеү. Дуҫлыҡ хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр табыу. Телмәр үҫтереү. Күрһәтеү алмаштары. Диалог.

**4. Ҡыш дауам итә – 7 сәғәт.**

Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәре.Текстар уҡыу, шиғырҙар, һынамыштар ятлау, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу. Исемдәрҙең күплек ялғауҙары. Һөйләм. Һөйләм төрҙәре. Яңғыҙлыҡ исемдәр.

**5. Яҙ килә, яҙ! – 6 сәғәт.**

Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү. Осоп килеүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү. 8 март, 1 май, 9 май байрамдары тураһында әңгәмә ҡороу. Һүҙлек запасын байытыу, яҙыу һәм уҡыу телмәрен үҫтереү. Һандар. Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Сифат (ҡабатлау).

**6. Йәмле йәй килә – 4 сәғәт.**

Темаға ярашлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү. Уҡытыусы менән, үҙ – ара әңгәмәләшеү, диалог төҙөү. Парлап, төркөмләп, үҙ аллы эшләү. Бәйләнешле телмәр үҫтереү.Ҡылым. Һөйләм төрҙәре. 6 – сы класта үтелгән грамматик материалды ҡабатлау.

6 - сы класта телмәр үҫтереүгә 3 дәрес, контроль диктантҡа 2 сәғәт бүленә.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе. 7 класс.**

1. **Яңынан мәктәпкә – 3 әғәт.**

5-6-сы кластарҙа алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен алып тора. Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу. Грамматика: 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

2. **Ауыл тормошо. - 4 сәғәт.**

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр уҡыу. Грамматика: Ҡылым. һүҙбәйләнеш. Һөйләм төҙөлөшө.

3. **Башкортостан буйлап сәйәхәт - 3 әғәт.**

Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлап, белгән фактик материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү. Был тема буйынса уҡыусыларға яңы мәғлүмәт биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи

Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар мәғлүмәттәре менән таныштырып китеү («Арҡайым», «Сынташты», боронғо ҡалалар, алтын әйберҙәр табыу һ.б. тураһында), бының өсөн һуңғы йылдарҙа сыҡҡан матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеү. Был тема буйынса тәкдим ителгән әҫәрҙәр менән танышыу, уҡыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш алып барыла. Грамматика: Яңғыҙлыҡ исемдәр.

4. **Спорт. Спорт кәрәк – яраҡтары – 4 сәғәт.**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү. Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр. Грамматика: Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәре.

5. **Мин һәм беҙҙең ғаилә. – 4 сәғәт.**

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү. Грамматика: Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше.

6. **Сәнғәт оҫталары – 4 сәғәт.**

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.

Грамматика: Эйәртеү теркәүестәре. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Теркәүес темаһын нығытыу.

7. **Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? – 1 сәғәт.**

Был бүлектә исем ҡушыуҙа ҙур яуаплылыҡ булыуын аңлатыу, билдәле шәхестәрҙең күрһәткән батырлығы, уның бөйөклөгө тураһында әңгәмә ҡороу.

8 . **Борон-борон заманда... – 2 сәғәт.**

Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк. Грамматика: Киҫәксә тураһында төшөнсә. Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы. X. Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы 257 аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойоштороу. Грамматика: Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

9. **Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ – 1 сәғәт.**

Был бүлектә берҙәмлек, дуҫлыҡтың ҡәҙерен белеү тураһында белемдәрен арттырыу.

10. **Йәмле йәй – 2 сәғәт.**

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йөйгә ялы, хеҙмәте, өлөләргә ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү. Грамматика: 7-се класта үткәндәрҙе ҡабатлау, дөйөмләштереү.

7-се класта телмәр үҫтереүгә 2 сәғәт, контроль диктантҡа 3 сәғәт бүленә.

*Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе. 8 класс*

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө тәбиғәт - 6 сәғәт**

Кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар уҡыу. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәрен, логик баҫымды өйрәнеү. Исем менән ҡылымды ҡабатлау.

**Өфө менән танышыу - 4 сәғәт**

Өфө ҡалаһы, уның үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә үткәреү. Уның иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, һүрәттәр ҡарау. Һөйләм телмәрен үҫтереү. Класс алдында ҡыҫҡаса һөйләү. Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө. Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның бирелешен өйрәнеү.

**Хеҙмәт төбө – хөрмәт - 6 сәғәт**

Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыуҙы дауам итеү. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары менән осрашыу ойоштороу. Уҡыусыларға ниндәй һөнәр оҡшауы тураһында һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Ябай һөйләм төрҙәрен өйрәнеү.

**Аҡ-аҡ ҡыш - 5 сәғәт**

Ҡыш тураһында текстар, шиғырҙар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу. Яңы йылға бағышланған йырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр менән танышыу. Яңы йыл менән ҡотлау открыткаһы яҙырға өйрәнеү. Уҡытыусы һайлаған текст буйынса изложение яҙыу. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡуйыу осраҡтарын өйрәнеү.

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! – 5 сәғәт**

Яҙ миҙгеле тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Яҙғы байрамдар– 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләрҙә ҡатнашыу. Тултырыусының һөйләмдәге роле.

**Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ – 4 сәғәт**

Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы, ветерандарға, батырҙарға ҡарата ихтирамлы булыу, ғорурланыу. Данлыҡлы кешеләр менән кисәләр, осрашыуҙарҙа ҡатнашыу. Хәлдәр тураһында төшөнсә алыу. Һүҙлек менән эш күнекмәләре эшләү.

**Ай, Уралым, Уралым! – 4 сәғәт**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре тураһында диалог һәм монологтар төҙөү.

8 класта, телмәр үҫтереүгә 2 сәғәт, контроль диктантҡа 3 сәғәт , тест үткәреүгә 1 сәғәт бүленә.

**Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе. 9 класс.**

**1.Һаумы, мәктәп! – 4 сәғәт.**

Эш төрҙәре «Көҙ» темаһы менән берлектә алып барыла. «Көҙ» һәм «Мәктәп» темаһына шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡыу; мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар, һынамыштарҙы иҫкә төшөрөү. Алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе системалаштырыу, яңы мәғлүмәт менән таныштырыу. Һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш дауам итә. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Сифат. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәре.

**2. Башҡортостан тәбиғәте – 4 әғәт.**

Тыуған Республикаға карата мөхәббәт, ғорурлык тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә. Улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәтеү. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәреү, экскурсиялар ойоштороу. Исем. Сифат. Һөйләмдәрҙең эйәрсән киҫәктәре. Хәлдәр.

**3.Атамалар ни һөйләй? - 3 сәғәт.**

Кеше тормошонда атамаларҙың да (кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме; ауыл, ҡала, тау, йылға һ.б.) роле ҙур. Унһыҙ тормошто күҙ алдынала килтереп булмай. Атамалар бик күп. Тел ғилемендә уларҙы өйрәнеүсе фән бар. Ул – ономистика. Онамистика фәне үҙе бер нисә тармаҡтан тора: антропонимика, этнонимика, милли, халыҡ, ҡәбилә исемдәрен, зоонимика ҡош-ҡорт, хайуан ҡушаматтарын, космонимика өйрәнеүсе фән. Был теманы үтеү уҡыусының бала саҡтан уҡ үҙҙәре йәшәгән ауыл, ҡала, уларҙың янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә теләгән ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерә, тыуған төйәк менән ғорурланырға мөмкинлек бирә. Сөнки атамаларҙа ил тарихы, ер һәм шул ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халыҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары һ.б. сағыла. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.

**4. Башҡортостан мәҙәниәте – 4 сәғәт.**

Башҡортостанда театр сәнғәте. Республикалағы театрҙар һәм уларҙың хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү. М.Ғафури исемендәге Башҡорт Академия драма театрының барлыҡҡа килеүе тарихы (халыҡ артистары З.Бикбулатова, А.Мөбәрәков, Г.Мөбәрәкова). Театорҙың күренекле артистарының тормошо һәм ижады менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Театрҙың үткәне һәм киләсәге буйынса фекер алышыу ойоштороу. Өҫтәлмәлек тураһында төшөнсә. Тиң киҫәкле һөйләмдәр.

**5. Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы - 4 сәғәт.**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләү, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Һөйләм. Ябай һөйләм төрҙәре. Һүрәтләү саралары.

**6. Беҙ ҡышты ла яратабыҙ – 3 сәғәт.**

Бәйләнешле телмәрҙең яҙма һәм телдән формаларына берҙәй әһәмиәт бирелә. Ҡыш миҙгеле, уның үҙенсәлектәре тураһында һөйләү күҙ уңында тотола.

Өндәш һүҙҙәр. Ҡылым. Йәнләндереү.

**7. Меңгән атым – уң ҡанатым – 2 сәғәт.**

Ат, уның кеше тормошондағы билгәгән урыны. Йылҡы тоҡомо, башҡорт аттары, уларҙы йөшө, төҫө буйынса билдәләү үҙенсәлектәренә төшөндөрөү. "Өндәш һүҙҙәр", "Сифат" темаларын ҡабатлау.

**8.Тәбиғәт йәшеллеккә төрөнә . Йәмле йәй айҙары – 4 сәғәт.**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре. Ҡала һәм ауылда яҙғы эштәр: ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу. Дарыу үләндәренән гербарийҙар төҙөү, Еңеү көнөн билдәләү. Һуғыш ветерандары менән осрашыу, иҫтәлектәр яҙып алыу буйынса эш дауам итә. 9 – сы класта үтелгән грамматик материалды ҡабатлау, нығытыу.

9 – сы класта телмәр үҫтереүгә 2 сәғәт, контроль диктантҡа 3 сәғәт бүленә.

III. Тематик планлаштырыу

| 5 - се класс | |
|---|---|
| *Һаумы, мәктәп!* | 4 сәғәт |
| *Үҙем тураһында* | 3 сәғәт |
| *Йыл миҙгелдәре* | 4 сәғәт |
| *Башҡортостаныңды беләһеңме?* | 4 сәғәт |
| *Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена* | 3 сәғәт |
| *Яңы йыл менән!* | 3 сәғәт |
| *Аҙыҡ - түлек. Кейем - һалым. Өй. Магазин* | 4 сәғәт |
| *8 - се март катын - ҡыҙҙар байрамы* | 2 сәғәт |
| *Яҙ етте. Яҙғы эштәр* | 4 сәғәт |
| *Йәйҙе ҡаршылайбыҙ* | 3 сәғәт |
| **6 - сы класс** | |
| *Беҙҙең мәктәп* | 5 сәғәт |
| *Башҡортостан ере буйлап* | 5 сәғәт |
| *Дуҫлыҡ кәҙерен бел* | 4 сәғәт |
| *Ҡыш дауам итә* | 8 сәғәт |
| *Яҙ килә, яҙ!* | 7 сәғәт |
| *Йәмле йәй килә* | 5 сәғәт |
| **7 - се класс** | |
| *Яңынан мәктәпкә* | 4 сәғәт |
| *Ауыл тормошо* | 4 сәғәт |
| *Башҡортостан буйлап сәйәхәт* | 4 сәғәт |
| *Спорт. Спорт кәрәк - яраҡтары* | 4 сәғәт |
| *Мин һәм беҙҙең ғаилә* | 5 сәғәт |

| | |
|---|---|
| *Сәнғәт оҫталары* | 4 сәғәт |
| *Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?* | 2 сәғәт |
| *Борон - борон заманда...* | 2 сәғәт |
| *Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ* | 2 сәғәт |
| *Йәмле йәй* | 3 сәғәт |
| 8- се класс | |
| *Көҙгө эштәр һәм көҙгө тәбиғәт* | 5 сәғәт |
| *Өфө менән танышыу* | 4 сәғәт |
| *Хеҙмәт төбө - хөрмәт* | 6 сәғәт |
| *Ап - аҡ ҡыш* | 7 сәғәт |
| *Йәмле яҙ, һағындыҡ һине!* | 4 сәғәт |
| *Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ* | 3 сәғәт |
| *Ай, Уралым, Уралым!* | 5 сәғәт |
| 9 - сы класс | |
| *Һаумы, мәктәп!* | 5 сәғәт |
| *Башҡортостан тәбиғәте* | 4 сәғәт |
| *Атамалар ни һөйләй?* | 4 сәғә |
| *Башҡортостан мәҙәниәте* | 4 сәғәт |
| *Халыҡ ижады - халыҡ хазинаһы* | 4 сәғәт |
| *Беҙ ҡышты ла яратабыҙ* | 5 сәғәт |
| *Менгән атым - уң ҡанатым* | 2 сәғәт |
| *Тәбиғәт йәшеллеккә төрөнә. Йәмле йәй айҙары* | 5 сәғәт |

Прошито, пронумеровано и скреплено печатью

12 листов

Директор

МОБУ СОШ с. Нугуш

Габбасова Г.Ш.